Раҫлайым
мәғариф бүлеге началинигы
Нәбиева Мәнзүрә Йәүҙәт ҡыҙы

________________

# ЙӘЙЛӘҮ

**(профилле сменалар үткәреү өсөн төҙөлгән программа)**

**Саҡмағош – 2017 йыл**

| | |
|---|---|
| **Программаның тулы атамаһы** | “Йәйләү” балаларға өҫтәмә белем биреү, рухи һәм физик сәләмәтлектәрен нығытыу йүнәлешендә эшләүсе профилле смена |
| **Программаны үткәреү урыны** | Башҡортостан Республикаһы Саҡмағош районы муниципаль район хакимиәтенең Саҡмағош ауылы Гимназияһы – мунципаль бюджет дөйөм белем биреү учреждениеһы |
| **Программаның маҡсаты һәм бурыстары** | Баланың тәбиғи һәләтен асыу маҡсатында туған тел мөхите булдырыу, һәр яҡлап үҫешенә йүнәлеш биреү өсөн шарттар тыуҙырыу, сәләмәтлеген нығытыу өсөн – балалар уйындары, спорт ярыштары үткәреү, сәйәхәттәргә алып сығыу, туған телдә йырҙар башҡарыу, ырыу тарихы аша үҙ халҡының тарихын өйрәнеү, “Йәйләү” урынлашҡан төбәктәге топонимик атамаларға ҡарата ижад ителгән легендаларҙы өйрәнеү аша үҙ төбәге тарихына ҡыҙыҡһыныу уятыу, халыҡ шәхестәренең, күренекле әһелдәренең тормош һәм ижад юлын өйрәнеү маҡсатында улар исеменә конкурстар үткәреү, ҡыҫҡа ваҡытка сәйәхәттәргә алып сығып, тирә-яҡтың үҫемлектәре, ҡош-ҡорто, йәнлек-хайуандары менән таныштырыу һәм туған телдә уларҙың атамаларын өйрәтеү, һәр баланы сәхнәгә сығарыу, мотлаҡ йырлатыу һәм бейетеү.<br>**Бурыстар:**<br>баланың ҡанына һалынған һәләтен асыу;<br>балала тыуған төбәккә, тәбиғәткә, илгә ҡарата һөйөү уятыу, тәбиғәтте һаҡлау зарурлығын аңлатыу;<br>музыка ҡоралдарында уйнауҙы8 рухи сәләмәтлеккә лә, физик сәләмәтлеккә лә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу аша уйнарға өйрәтеү;<br>бейей һәм йырлай белеүҙең сәхнә өсөн генә түгел, көндәлек тормошта сәләмәт йәшәү шарттарының нигеҙе икәнлеген, рухи сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһауын аңлатыу һәм хеҙмәткә өйрәтеү;<br>саф һауала, сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир яһарлыҡ шарттарҙа баланың физик һәм рухи ҡиммәттәрен үҫтереүгә, үҙ тәрбиә менән шөғөлләнергә йүнәлеш биреү; |

| | |
|---|---|
| | баланы үҙе өсөн генә түгел, коллектив (“Йәйләү”ҙә ырыу) өсөн дә, артабан мәктәп, уҡыған һәм эшләгән коллективы өсөн дә йәшәргә, борсолорға, уның мәнфәғәтен күҙәтергә өйрәтеү;<br>буш ваҡытты дөрөҫ файҙаланырға, ялды ойоштора белергә, беренсел мөһим бурысты үтә мөһим булмағандарынан айырып өйрәте1;<br>бер генә минутты ла бушҡа үткәрмәй, файҙалы маҡсаттарға йүнәлтеп өйрәнеү күнекмәһе булдырыу, баланы үҙ-ара мөғәмәлә итеү, бәхәсләшеү, тапҡыр һәм дөрөҫ яуап биреү күнекмәһе тәрбиәләү;<br>баланың күңел донъяһына ыңғай тәьҫир итеү; башҡаларҙы аңлау өсөн, үҙеңде уның урынына ҡуйып ҡарарға өйрәтеү. |
| **Программаны8 төп эш йүнәлештәре** | Программала аҙ ваҡыт эсендә бик күп бурысты тормошҡа ашырыу маҡсаты билдәләнгән, шуның өсөн төрлө йүнәлештәр ҡаралған:<br>белем биреү;<br>рухи-әхлаҡи тәрбиә;<br>спорт-һауыҡтырыу;<br>ижади эшмәкәрлек;<br>илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү;<br>мәҙәни-тарихи белем биреү һәм ғәмәли башҡарыу;<br>социаль-көнкүреш һабаҡтары. |
| | һәр ырыубыҙ тарихы, мәҙәниәте аша башҡорт халҡының тарихын, мәҙәни тарихын, мәҙәниәтен, шәхестәрен, ижадын өйрәнеү;<br>башҡорт балалар уйындарын өйрәнеү;<br>ҡул эштәре оҫталығына өйрәнеү;<br>йыр-бейеү, сәсәнлек, нәфис һүҙ оҫталығына өйрәнеү;<br>топонимик легендалар һәм иҫтәлекле урындар менән танышыу һәм тасуирлай белеү;<br>күренекле кешеләр менән осрашыу;<br>һорау биреп, әңгәмә ҡороп өйрәнеү |
| **Программала** | 50 бала |

| | |
|---|---|
| **ҡатнашыусыларҙың дөйөм һаны** | |
| **Программала ҡатнашыусыларҙың йәше** | 7 йәштән 15 йәшкә тиклемге балалар |
| **Ниндәй һөҙөмтәләргә өлгәшеү күҙ уңында тотола** | Рухи сәләмәтлек тәрбиәләү өсөн үҙ халҡыңдың быуаттарҙан-быуаттарға һынала, камиллаша, күсә килгән рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү; республикабыҙға исем биргән башҡорт халҡының һәм быуаттар элек был ерҙәргә күсеп ултырған башҡа милләт вәкилдәренең тарихы, традицияһы тураһында мәғлүмәт алыу, ихтирамлы мөнәсәбәт нигеҙендә интернациональ, толерантлы7 тойғо3о тәрбиәләү маҡсатында һәр балала иң элек үҙ туған теленә, халҡына ҡарата һөйөү тәрбиәләү. |

## Аңлатмалы яҙыу һәм программаның актуаллеге

“Йәйләү”ҙең төп маҡсаты – балаларҙы физик һәм рухи яҡтан сыныҡтырыу, уҡыусының һәр яҡлап һәләтен асыу өсөн йүнәлеш биреү, артабан үҙтәрбиә менән шөғөлләнеүгә нигеҙ һалыу, бала булмышында, аңында Тәбиғәттән бирелгән, быуындан-быуынға күсә килгән һәләтен уятыу. Ә бындай тәрбиә биреү,бөйөк фекер эйәләре Ян Коменский, Ю Лесгафт, Ҡәйүм Насыри, И. Пестолоцци, Лев Толстой, Ризаитдин Фәхретдинов, Тажетдин Ялсығол һәм, әлбиттә, Константин Ушинскийҙарың фекеренсә, баланың тәбиғи һәләтен асыуҙа иң беренсе урында туған тел, халыҡ педагогикаһы торорға тейеш.

Бөтөн халыҡтар ҙа үҙ киләсәген үҙтәжрибәһендә тупланған халыҡ педагогикаһы нигеҙендә тәрбиәләгән. Ушинский фекеренсә, халыҡсанлыҡ принциптары төп урында торорға, тәрбиә эшенең нигеҙен тәшкил итергә тейеш. Халыҡ педагогикаһы – ул ҡағиҙәләр түгел. Халыҡ педагогикаһы һәр халыҡтың тарихы, традициялары, йолалары, мәҙәниәте, сәнғәте, ижады аша алып барылған тәрбиә. Ошо нигеҙҙә ил һөйәрлек тәрбиәләнә. Илһөйәрлек – ул үҙ милләтеңде, үҙең йәшәгән төбәкте генә түгел, ә уларға булған һөйөү аша бөтөн халыҡтарға, бөтөн илдәргә ҡарата ла йылы мөнәсәбәт тыуҙырыу тигән һүҙ. Әммә бөгөнгө мәктәптәрҙә, беҙ был принциптарға таянып эш итә алмайбыҙ, мәктәптәребеҙ күп милләтле, һәм беҙ, донъя халыҡтары, шулай уҡ һәр халыҡта айырым-айырым тупланған рухи ҡиммәттәрҙе файҙалана

алмайбыҙ, йәғни Ушинский билдәләгән төп принципты, туған тел мөхите булдырып, туған тел аша халыҡтың быуаттар буйы тупланған хазинаһын тәрбиә эшендә ҡуллана алмайбыҙ.

Ушинский билдәләүенсә, халыҡ тарихы, уның тәжрибәһе, әхлаҡи һәм эстетик хыялы, уның Ватанға булған һөйөүе, уй-хыялдары һәм киләсәккә өмөтө, әйтәһе фекере туған телҡиммәттәрендә һаҡлана һәм фәҡәт туған тел аша бала күңеленә юл ярып була. Шуның өсөн әле кешелек донъяһында китаптар ҙа, мәктәптәр ҙә булмаған замандарҙа уҡ балала рухи ҡиммәттәр тәрбиәләнгән. Әммә, халыҡтың прогрессив традицияларын файҙаланып, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә булһа ла “Йәйләү” профилле сменаһының программаһы нигеҙендә ошо бушлыҡты тултырырға мөмкинселек бар.

Һәр хәлдә халыҡ традицияларының иң һәйбәт өлгөләре нигеҙендә бала күңеленә тәбиғәттән һалынған рухи ҡиммәттәрҙе уятып ебәреү өсөн йүнәлеш биреп була. Был программа нигеҙендә рухи байлыҡҡа ҡарата һөйөү уятыла, артабан тормошта ошо йүнәлештә үҙтәрбиә менән шөғөлләнерлек йүнәлеш бирелә. Был - заман талабы, сөнки донъяла барған кире күренештәр  бала күңеленә  юл яра, аңын томалай.

Үҫмер телевидение, интернет аша үҙ белдеге менән төрлөтапшырыуҙар ҡарап, ҡанына һалынған рухи ҡиммәттәргә юл ябып, бөтөнләй ят мөхит тәрбиәһе солғанышында ҡалыуы, үҙен юғалтыуы ихтимал. Көнбайыш һәм Америка тәьҫирен һаман нығыраҡ тоябыҙ.

Ошондай шарттарҙа бала күңелен кире йоғонтонан ҡурсалап алып ҡалыуҙың иң ышаныслы юлдарының береһе – Константин Ушинский тәғлимәте икәнлегенә программаның ике тиҫтәгә яҡын уңышлы эшләп килеүе аша инанғанбыҙ: ысынлап та, туған телде өйрәнеү, байытыу, халҡыбыҙ фәлсәфәһен аңларлыҡ кимәлгә еткереү, бала күңелендә иң элек туған халҡыңа, уның теленә, ижадына, тарихына һөйөү орлоғо сәсеүҙән башлана. Был маҡсатты иһә беҙ аҙ ғына ваҡыт эсендә (өс аҙна) төрлө юлдар, төрлө ысулдар, төрлө алымдар менән тейешле мөхит солғанышында тормошҡа ашырабыҙ. Был олоғара эште башҡарып сығыу өсөн бик әҙерлекле тәрбиәселәр, әйҙәүселәр, хеҙмәткәрҙәр, музыка белгестәре, хатта аш-һыу атамаһын башҡортса әйтеп тороусы ашнаҡсылар кәрәк. Әлбиттә, бик ҡыҫҡа осорҙа бала күңелендә ҡырҡа боролош яһау күҙҙә тотолмай, ул маҡсат ҡуйылмай ҙа. Ә аңына ыңғай яҡтан тәьҫир итеү, сәләмәт тормош алып барыуҙың мөһимлеген аңлатыу, коллективта үҙеңде тотоу, һыйышып тыныс йәшәү принциптарына, сәмле ярыш, бәхәс алымдарына өйрәтеү һәр үткәрелгән сарала төп маҡсаттарҙың береһе итеп ҡуйыла.

Ырыуҙарға бүленеү шартлы рәүештә булһа ла, балалар, тәғәйен ырыуҙарҙан тупланып, ырыу тарихын, шәхестәрен, боронғо шөғөлөн өйрәнеп, дөйөм халыҡтың рухи һәм матди ҡиммәттәрен өйрәнәсәк.

**Ял итеүселәрҙең йәше 7-15 араһы. "Йәйләү" отрядтарға түгел, ырыуҙарға бүленеп эшләй.** Ырыуҙар төрлө йәштәге балаларҙан туплана.

**Программаны эшләгәндә, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының белем биреү, балалар хоҡуғын яҡлау, хеҙмәт кодексы, хеҙмәт һәм ял итеүгә ҡағылған бөтә Закондар һәм норматив-хоҡуҡи документтар иҫәпкә алынды.**

Балаларҙың ял итеү сменаһына уҡытыусылар, тәрбиәселәр һәм әйҙәүселәр һайлап алына, әммә төрлө коллективтарҙантупланған ваҡытлыса педагогик коллективты программа менән таныштырыу һәм йүнәлеш биреү мотлаҡ.

***"Йәйләү" балаларға өҫтәмә белем биреү, рухи һәм физик сәләмәтлектәрен нығытыу йүнәлешендә эшләүсе профилле сменаның көндөҙгө ял итеү үҙәге (лагерҙары) өсөн 21 көнлөк программа.***

***"Йәйләү"ҙең саралар теҙмәһе***

"Йәйләү"гә килеү. Ырыуҙарға бүлеү. Ҡор башы һайлау.
"Йәйләү"ҙе асыуға әҙерләнеү: атрибуттар ятлау, ырыу йыры, девиз өйрәнеү, тамға төшөрөү, бүлмәләргә исемлек яҙыу.
"Йәйләү"ҙә үткәрелергә тейешле саралар теҙмәһен яҙып элеү.

Йәш рассәмдәр ярышы. Ҡасим Дәүләткилдиев исемендәге конкурс.

Спорт ярыштары. Алпамыша конкурсы.

Сәсәндәр ярышы. Ерәнсә сәсән, Бәндәбикә, Мөхәмәтша Буранғолов һәм тағы бер нисә сәсән тураһында мәғлүмәт.

Ырыуҙар сығышына әҙерлек башлау.

Йырсылар ярышы. Башҡорттоң атаҡлы йырсылары менән таныштырыу. Берәһенең исеменә конкурс.

Бейеүселәр ярышы.Башҡорттоң атаҡлы бейеүселәре менән таныштырыу. Береһенең исеменә конкурс.

Сәхнә оҫталары ярышы.

Юғалған мәҡәлдәр.

Юғалған йыр юлдары.

**1-се көн**.

Ял итергә килеүсе балаларҙы ҡабул итеү. Ырыуҙарға бүлеү. Балаларҙы оҙаҡ тотмаҫ өсөн, йәшенә ҡарап алдан уҡ бүленә. “Йәйләү” урынлашҡан төп лагерь биләмәһе ниндәй ырыу еренә ҡарай - иң өлкән төркөмгә шул ырыу атмаһы бирелә һәм иң өлкән балалар туплана. Был ырыу Хужа ырыу һанала һәм төп эштәрҙе башҡарыуҙа тәрбиәселәргә, әйҙәүселәргә ярҙам итә йәғни бөтөн сараларҙы ла иң элек улар башлап күрһәтә, башҡалар өлгө ала. Шуның өсөн был ырыуға тәжрибәле тәрбиәсе һәм әйҙәүсе тәғәйенләнә.

Артабан балаларҙың йәшенә ҡарап башҡа ырыуҙарға бүленәләр. Ырыуҙар, лагерь мөмкинлегенән, нисә тәрбиәсе һәм әйҙәүсе булыуынан сығып, ике-өс-дүрткә бүленә. Табын, тамъян, мең, ҡыпсаҡ, үҫәргән, ҡатай, юрматы, әйлеһәм башҡа ырыуҙарҙың исеме һайлап алып ҡушыла.

Ырыуҙар үҙҙәренә тәғәйен бүлмәләргә урынлаша. Әйҙәүселәр уларҙы лагерҙағы бүлмәләр, майҙан, ашхана, ял итеү урыны һәм ял тәртибе менән таныштырып сыға.

***“Йәйләү”ҙең үҙенсәлеге:***

а) аралашыу мотлаҡ башҡорт телендә;

б)һәр бала бөтөн сараларҙа ла мотлаҡ ҡатнашырға тейеш;

в) сараларҙа ҡатнашҡан өсөн бер мәрәй бирелә, сараларҙа ҡатнашып, ниндәйҙер баһаларға өлгәшһә, мәрәйҙәр өҫтәлә бара.

***Иҫкәрмә.***

*Нимә ул мәрәй? Мәрәй тәртибе балаларҙың әүҙемлеген арттырыу, ярыш сәмен ҡуҙғытыу өсөн индерелә. “Йәйләү”ҙә ял аҙағында йәрминкә ойоштороло. Йәрминкәлә был мәрәйҙәр “аҡсаға әйләнә” һәм әйберҙәргә алмаштырыла. Әйберҙәр хаҡы (шул иҫәптән тәм-том, уны башҡа*

*лагерҙарҙағы тәртип кеүек ярыш һайын айырым балаларға бирә бармайбыҙ, йәрминкә өсөн ҡалдырабыҙ) түбәндәгесә билдәләнә: балалар йыйған мәрәйҙең иң күбе нисәү икәнлеген беләбеҙ ҙә шунан сығып иҫәпләйбеҙ. Әйтәйек, бер бала йыйған иң күп мәрәйҙәр һаны 92, 89, 83, 81 икән, ти. Ошо һандан 20 мәрәйҙе балаға тәм-том йәки башҡа "арзанырак" әйберҙәр алырға ҡалдырабыҙ ҙа, иң ҡиммәтлеһенә хаҡты 61 – 70 мәрәй тип билдәләйбеҙ. Ә тәм-томға: кәнфит –2, печенье – 1, һауытлы һут – 3, шоколад – 5 мәрәй тигән хаҡтар билдәләйбеҙ. Артабан әйберҙәрҙең сифаты буйынса бүлеп сығабыҙ ҙа 21-30 мәрәй, 31- 40 мәрәй, 41- 50 мәрәй, 51- 60 мәрәй тигән хаҡтар билдәләйбеҙ. Әйбер "һатыу" эше әйҙәүселәргә һәм тәрбиәселәргә йөкмәтелә. Алмаштырылған мәрәйҙәр шунда уҡ йыртыла бара. Өлкән тәрбиәсе тәртип һаҡлай.*

г) һәр бүлмә аҡ ҡағыҙ битенә балаларҙың исемлеген яҙып ишеккә элә. Исем-фамилия мотлаҡ башҡортса яҙыла;
д) әйҙәүсе һәр балаға "Йәйләү" гимны тип ҡабул ителгән "Башҡортостан" йыры (Дамир Әҙелбаев һүҙҙәре һәм көйө) һүҙҙәрен таратып бирә.
е) ҙур ватман ҡағыҙға ырыу атрибуттары һәм күмәкләшеп һайлап алынған ырыу йыры, ырыу девизы яҙып элена. Ырыу башы һайлана.Мөмкинлеккә ҡарап, кис, ашауҙан һуң, ырыу атрибуттарын һәм йырын, шулай уҡ гимнды өйрәнә башлайҙар. (***Гимн һүҙҙәре ҡушымтала***).

**2-се көн.**

Балалар иртәнге күнекмәләрҙе башҡортса бейеү көйөнә бейеп тамамлап ҡуя.

Был көнө сменаны асыуға әҙерлек бара.

Хужа ырыуҙаәҙерлек. Ырыу башы етәкселегендә атрибут әйтеп өйрәнә, девиз, йыр һәм гимн ҡабатлай, ҡаршы алыу һүҙҙәре ятлай. Башҡа ырыу балалары ла атрибуттар, йыр һәм гимн ятлай. Бейеү һалыусы Хужа ырыуға күмәк бейеү өйрәтә. Ул өс төрлө хәрәкәттән генә торорға тейеш. Бейеүҙе хужа ырыу башлай, шунан дүрт төркөмгә бүленеп (ырыуҙар һаны һәм ҡунаҡтар төркөмө), ырыуҙарҙы һәм ҡунаҡтар төркөмөн үҙҙәре өйрәнгән хәрәкәттәр менән бейетә.

**3-сө көн.**

“Йәйләү”ҙе асыу.

Асыу тантанаһында майҙан тирмә рәүешендәрәк түңәрәк була. Ырыуҙар линейкаға теҙелеп тормай, майҙандың тирә-яғынан урын ала, Йәйләү асылғандан һуң ултыралар. Ә ҡунаҡтар өсөн махсус урын әҙерләнә. Ҙур сәхнә түре башҡортсалап биҙәлә. Сәхнә тирәләй ырыуҙарҙың гәзиттәре эленә.

Хужа ырыу балалары араһынан ике алып барыусы, Ырыу башы һәм килгән ҡунаҡтарҙы, ырыуҙарҙы ҡаршылау өсөн яуаплылар билдәләнә.

Иң тәүҙә етәкселәр, тәрбиәселәр, саҡырылған ҡунаҡтар инә. Уларҙы ҡаршы алалар.

- Хуш килдегеҙ, хөрмәтле ҡунаҡтар! Беҙҙең данлыҡлы һәм ҡунаҡсыл ..... ырыу еренә рәхим итегеҙ.
- Рәхим итегеҙ. Рәхәтләнеп ял итегеҙ.

  *Шул саҡ оран ишетелә. Ҡаршылау өсөн яуаплы ике бала:*
- Был бит Ҡыпсаҡ ырыуының ораны. Етеп киләләрҙер. Оран тауышы яҡын ишетелә.

  *(Ырыу исемен әйтәләр) Мәҫәлән*:
- Ҡыпсаҡтар килә! Ҡыпсаҡтар! Былбит ҡыпсаҡтар ораны!
- Алыҫ ерҙе яҡын итеп хуш киләһегеҙ, ҡыпсаҡ туғандар.
- Ер-һыу именме?
- Нисек килеп еттегеҙ?

  *Шулай итеп, бөтөн ырыуҙар ҙа йыйылып бөткәс, Хужа ырыу теҙелеп баҫа.*

  *Өлкән тәрбиәсе:*
- Ҡәҙерле балалар! Хөрмәтле ҡунаҡтар! Күҙ күреме ерҙәрҙән килеп еттегеҙ. Рәхмәт. Беҙ бөгөн ... (мәҫәлән – Мең) ырыуы ерендә “Йәйләү”ҙе асыу тантанаһына йыйҙыҡ һеҙҙе. Әйҙәгеҙ, танышайыҡ.

  *Хужа ырыу башы:*
- Ырыуыбыҙ?
- *Яуап.*
- Тамғабыҙ?
- *Яуап.*

- Ҡошобоҙ?
- *Яуап.*
- Ағасыбыҙ?
- *Яуап.*
- Батырыбыҙ?
- *Яуап.*
- Оранылыҙ?
- *Яуап.*
- Девизыбыҙ?
- *Яуап.*
- Йырыбыҙ?
- *Яуап.*

  *Шул тәртиптә артабан ҡунаҡҡа килгән ырыуҙар менән танышыу дауам итә. Тамамланғас, өлкән тәрбиәсе:*
- Илебеҙ?
- Башҡортостан.
- Ял итәбеҙ?
- Боронғо ...ырыуы еренд**ә**, “Йәйләү”ҙә.

Ҡәҙерле балалар! Хөрмәтле ҡунаҡтар! Беҙ Башҡортостандың иң гүзәл төбәктәренең береһе булған ... ырыуы ерenә ял итергә килдек. Беҙ бында тәнебеҙҙе лә, йәнебеҙҙе лә сәләмәтләндерербеҙ. Ә хәҙер быйыл шундай-шундай еңеүҙәргә өлгәшеүсе ике уҡыусыны һәм Ырыу башлыҡтарын саҡырабыҙ. *Саҡырылған балалар Өлкән тәрбиәсе янына килә. Иң тәүҙә Рәсәй Федерацияһының, һуңынан Башҡортостан Республикаһының гимндары башҡарыла.*

“Йәйләү” балалары, үҙебеҙҙең гимнды башлайыҡ! Ә һеҙ, балалар, байрағыбыҙҙы күтәрегеҙ.

*“Башҡортостан” – “Йәйләү” өсөн махсус тәғәйенләнгән гимн башҡарыла. Байраҡ күтәрелә. Балалар урындарына баҫалар.*

*Өлкән тәрбиәсе:*

- Шулай итеп, бөгөнгө тантананы асыҡ тип иғлан итәбеҙ. Һүҙҙе “Йәйләү” директорына бирәбеҙ.

*Директор килгән ҡунаҡтар менән таныштыра һәм һүҙ бирә.*
*Һөйләү-котлауҙар тамамланғас, өлкән тәрбиәсе:*

- Ә хәҙер “Йәйләү”ҙе асыу тантанаһы өсөн махсус әҙерләнгән күмәк бейеү.

*Музыка. Хужа ырыу бейеү башлай. Шунан төркөмдәргә бүленәләр. Беренсе төркөм ҡунаҡтарҙы бейергә алып төшә. Башҡа төркөмдәр ырыуҙарҙы бейетә. Һәр береһе өсәр башҡорт хәрәкәте эшләтә.*
*Өлкән тәрбиәсе:*

- Шуның менән “Йәйләү”ҙе асыу тантанаһы тамам. Балалар, һеҙ бейеүҙе дауам итерһегеҙ. Ә хәҙер ҡунаҡтар менән хушлашайыҡ.
- Рәхмәт килеүегеҙгә. Артабанғы тормошоғоҙҙа уңыштар теләйбеҙ. Именлек, һаулыҡ айырылмаç юлдашығыҙ булһын!

**Кис “Көнгә йомғаҡ яһау” һөйләшеүе үткәрелә**.

Тантаналы асыу тураһында фекер алышҡандан һуң, ял итеү программаһының төп саралары һәм мотлаҡ үтәлергә тейешле шарттар тураһында һөйләшеү үткәрелә. Был эште һәр ырыуҙың үҙ тәрбиәсеһе алып бара.

***<u>Иçкәрмә. Мотлаҡ башҡарыла торған сараларға аңлатма бирергә:</u>***

*а) иртәнге аштан һуң тотош “Йәйләү” бергә йыйылып, һәр береһе атрибуттарын, девизын әйтеп, йырын йырлай. Һөйләшеүҙе өлкән тәрбиәсе алып бара. Ул башҡаларға һүҙ бирә. Лагерь етәкселеге ҡыçҡаса йомғаҡ яһай, тотош сменаға ҡағылышлы иçкәртеүҙәрен әйтә. Шунан “Онотоп ҡалдырылған әйберҙе һатып алыу" үткәрелә. Әйберен юғалтҡан бала уны башҡаларҙың һорауы буйынса төрлө оçталығын күрһәтеп “һатып” ала. Йыр, бейеү, шиғыр,*

*төрлө йән эйәләрен йәки әйберҙәрҙе һынландырыу (айыу атлауы, урман шаулауы, самауыр ҡайнауы һ.б.);*
*б) көн торошона ҡарап төҙөлгән үҙгәрешле программа менән таныштырыу;*
*в) шәхестәребеҙ исеменә ярыштар;*
*г) ырыуҙар концерты;*
*д) әңгәмәләр: өлкән төркөмдә "Урал батыр" эпосында ғилми фекерҙәр; башҡа төркөмдәрҙә һәр кешенең шәхсән үҙе өсөн туған телдең әһәмиәте тураһында. Яҙып эленгән мәҡәлдәрҙе ятлай башларға.*
*ж)нимә ул йәрминкә? Мәрәйҙәр ни өсөн бирелә һәм нисек файҙаланыла?*
*з) "Йәйләү" батыры. Ярыш шарттары. "Йәйләү" һылыуы. Ярыш шарттары.Уҡ атып өйрәнә башларға.*
*е) Һабантуй нимә ул? Ярыштарға көн һайын әҙерләнә барыу.*
*"Йәйләү"ҙе ябыу тантанаһында буласаҡ концерт номерҙарына ла әҙерләнә башлау. Һәр ырыу концертынан өсәр сығыш. "Урал батыр" – дөйөм сығыш, башҡорт милли инструменттарында башҡарыу. Ырыуға һалынған бейеү һәм тотош " Йәйләү" балалары өсөн бейеү.*

**4- се көн.**

"Алпамыша" спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*).
Рәссам Ҡасим Дәүләткилдеев призына ярыштар.
Осрашыу. Әңгәмә.
Тәрбиәсе ярҙамында балалар мәҡәлдәр яҙып элә. Матур итеп биҙәп, бар оҫталыҡтарын һалып эшләйҙәр. Әүҙемлеккә ҡарап 1 йәки 2 мәрәй бирелә. Һәр ырыу балалар һанына ҡарап ике кешегә берәр мәҡәл яҙып элә һәм "Юғалған мәҡәлдәр" уйынына тиклем шуларҙы ятларға тейештәр (*уйын тәртибе һәм мәҡәлдәр ҡушымтала бирелә*).

**5-се көн.**

"Алпамыша" спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*).

“Алтын тирмә” ярышы. Ырыу менән ырыу ярышы. Йомаҡ ҡойоу һәм  яуаптар. Халҡыбыҙҙың бөйөк әһелдәрен, республикабыҙҙың тәбиғи ҡомартҡыларын, һәйкәлдәр, йырҙар, ҡалалар тураһында һорау.

**6-сы көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*).
Бейеү өйрәнеү. Аҡмулла исемендәге призға сәсәндәр ярышы. Әйтеш.
“Алтын тирмә” ярышының дауамы (икенсе ырыуҙар ҡатнаша). Йомаҡтарға яуаптар. Халҡыбыҙҙың бөйөк әһелдәрен, республикабыҙҙың тәбиғи ҡомартҡыларын, һәйкәлдәр, йырҙар, ҡалалар тураһында һорауҙарға яуаптар биреү. Ырыу менән ырыу ярышы.
Осрашыу. Әңгәмә.

**7-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*). Шахмат, шашка (сатраш) уйнаусылар ярышы.
Бейеү. Йыр.
Әсмә Шайморатова һәм Мәғәфүр Хисмәтуллин исемендәге призға йырсылар ярышы.Йырсылар тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирергә. Данлыҡлы йырсыларҙан кемдәрҙе белеүҙәре тураһында һорауҙар биреү. Мәғлүмәттәр дәреслектәрҙә бар.
“Юғалған мәҡәлдәр” кисәһе.
Осрашыу. Әңгәмә.

**8-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*). ярышы. Шахмат, шашка (сатраш) уйнаусылар ярышы.
<u>Тарихи шәхестәр</u>. Салауат Юлаев яугир, шағир. Әҙәбиәттә, кино-фильмда, һынлы сәнғәттә, драма әҫәрҙәрендә, йырҙарҙа. Уның исеме тағы ҡайҙарҙа мәңгеләштерелгән?
Осрашыу. Әңгәмә.

**9-сы көн.**

Музыка ҡоралдарында уйнап өйрәнеүҙе дауам итеү.
Бейергә өйрәнеү. Данлыҡлы бейеүселәр Рәшиҙә Туйсина, Мөхәммәт Иҙрисов, бейеү ансамбленә нигеҙ һалыусы Фәйзи Ғәскәровтарға арналған ярыш.  Улар хаҡында мәғлүмәт биреү. Бейеүселәрҙән кемдәрҙе белеүҙәре тураһында һорауҙар биреү.
Бейеүселәр ярышы.
Осрашыу. Әңгәмә.

**10-сы көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*). “Ырыу байрағы” өсөн алыш. Уйын.
Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге призға ярыш.“Һаумы, һаумы, әкиәт!” Фольклор нимә ул? Кем ул сәсән? Әкиәттәрҙе кем ижад итә?
Балалар үҙҙәре әкиәт һайлап алып сәхнәләштерә.
Осрашыуҙар. Әңгәмә.

**11-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары (*уйындар ҡушымтала бирелә*). “Ырыу байрағы” өсөн алыш уйыны.
Ҡурайсы һәм ҡумыҙсы тураһында мәғлүмәт. Данлыҡлы ҡурайсыларҙан һәм ҡумыҙсыларҙан тағы кемдәрҙе беләһегеҙ? – тигән һорау.
Хужа ырыу сығышы.
Ырыу концерты  һәм милли уйындар.

**12-се көн.**

“Йәйләү” батыры. Ярыш төрҙәре балаларҙың әҙерлегенә, тәбиғәт шарттарына ҡарап һайлана. Мотлаҡ булғандары: үҙең менән таныштырыу, уҡ атыш, һөнәр күрһәтеү, төрлө көйгә бейеү, ҡыҫҡа һорауҙарға ҡыҫҡа яуаптар.

**13-сө көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.“Ырыу байрағы” өсөн алыш. Футбол, волейбол.
Музыка ҡоралдарында уйнаусылар оркестры. Бейеү өйрәнеү.
“Йәйләү” һылыуы. Үҙең менән таныштырыу, һөнәр күрһәтеү, төрлө көйгә бейеү, сәс прическаһы, кейем өлгөһө күрһәтеү, ҡыҫҡа һорауҙар - ҡыҫҡа яуаптар.

**14-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.
Ырыу концерты  һәм милли уйындар
Кис таҡмаҡсылар ярышы. Милли уйындар.

**15-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.
Ырыу сығышы һәм милли уйындар.
Ерәнсә сәсән исемендәге призға ярыш. Көләмәс һөйләүселәр ярышы. Көләмәстәрҙе сәхнәләштереү.

**16-сы көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.
Ырыу сығышы һәм милли уйындар.
“Урал батыр” эпосы буйынса “Туған телеңде беләһеңме?” кисәһе.
Милли уйындар.

**17-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.
Ырыу сығышы һәм милли уйындар.
“Урал батыр” эпосы буйынса “Туған телеңде беләһеңме?” ярышы.
Милли уйындар.

**18-се көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары.
Һабантуй.
Һәр төрлө милли ярыштар.

**19-сы көн.**

“Алпамыша” спорт ярыштары. Төрлө милли уйындар.
Йәрминкә.
Ирекле программа. Ярыштар.
Киске уйындар.

**20-се көн.**

“Йәйләү”ҙе ябыу. Төнгө усаҡ.
“Урал батыр” эпосы буйынса флешмоб.

**21-се көн**.

“Йәйләү” менән хушлашыу. Ҡайтыу.

*ҠУШЫМТА*

I. **“Урал батыр” эпосы буйынса конкурсҡа һорауҙар**

**Туған телеңде беләһеңме?** (Һорауҙар балаларҙың әҙерлегенә ҡарап һайлап алына һәм алдан уҡ таратыла).

1. **Ҡаҙан аҫып**, ҡамыр баҫып,
   Улар донъя көтмәгән.

**2**.Ҡошҡа **сөйгән** шоңҡарҙы…
**3.Үҙ иштәре яһаған…**
4. Бик борондан булғанмы
Йәнбирҙе үҙе **ҡылғанмы…**
1. Йәнлек **иркәк** булдыниһә…
2. Үлән **емшәр** йән тотһа…
3. **Маҙаһына** тейгән һуң…

**8**.Әле арыҫлан менергә…
**Миҙгелегеҙ** етмәгән.
**9**.Сыйырсыҡтың т**убына**
**Яғылбайҙы** сөйөгөҙ.
**10.Йәнде ҡыйып** һунарлау
**Ҡомарлы эш** булмаһа…
**11.**Төндә йоҡлап ятҡанда -
Арыҫлан, болан, **ҡапланы**…
**12.Эт һөсләтеп** йәнлеккә…
13.Йомранына – **көҙәне…**
14.Үлемдән ҡурҡып **ялдымға…**
15.Ҡанды **һемереп эскән** , ти…
16.Ҡулыңдағы **һуйылға**
**Күҙ йүгертеп** ҡарасы...
17.Ас зарыҡҡан арыҫланың
Бәйҙә тороп **ужарып...**
18.Төндә йөрөп йәшелдең
Барыһын да **утлаһа…**
19.Барыбер аш булмамын,
Һис **аш булып һеңмәмен…**
20.Балалары ҡурҡышып,
**Ымлап** ҡынаһөйләшеп...
21.Мине **тиңгә алманың,**
Кире ҡаҡтың һүҙемде.

22.Тора-бара йыландың
Һис **тәкәте ҡалмаған**.
23.Ун ике **тарбаҡ мөгөҙлө**
Болан табып **ей** тине.
24.**Ут һөрөмө** ҡаплаған.
25.Осораған беркүлгә
Ситен **ҡуға** ураткан,
Томбойоҡтар япрайып,
**Тик ағастай** сәскә атҡан,
**Һаҙмыт** түгел, ҡырсын төп…
26.Арыҫлан ҡылыны алып,
**Мәскәү** яһамаҡ булған.
27.**Хур ҡунаҡтан йүпәтләп**
Бер ҙур дейеү килгән, ти.
28.**Ҡош туптары** барыһы…
29.Күс башлығы инәләй…
30.Тирә-яҡты **һәрмәгәс,**
Берен-бере тапмағас...
31.Ҡан **көҫәгән**, йәш түккән,
32.Ҡотҡарырға кешене,
**Тындырырға** барыны…
33.Йөҙөн һис **тут** алмаҫтай,
Һис берәү **кәр** ҡылмаҫтай.
34.Ҡаты елгә борсолмай,
**Шаҙраланып** өҫтәре…
35.Бында килеп сығырға
**Ни бәләгә тарыҡтың?**
36.Муйыныңа **ырмау** һалғанда,
Йәнең алҡымға килгәндә…
37.Күләгәләй йөрөрҙәр,
**Баҫмалатып килерҙәр**
38. Ултырғанда Шүлгәндең
**Һытыҡ йөҙөн** күргәнгә...
39.Ауыҙлыҡ сәйнәп, ярһыуҙан
**Ауыҙҙарын күпсетер**
40.Шүлгән барып **уҡталған,**
41.Барыһы күккә **баҡҡан**, ти…

42.**Һыңар** ҡулын һуҙған ти.
/Ниндәй осраҡта ***бер,*** ә ҡайһы осраҡта ***һыңар*** тип әйтәләр?/
43.Ҡайтып килгән сағында,
**Ялҡын сырмап** алған ти.
44.Ташты буйға атҡанын
**Йәнә** күрҙем төштә мин.
Ул таш диңгеҙ ашаға
**Сорғап** китте йыраҡҡа.
45.Һомай белгәс**, һиçкәнгән…**
46. Ҙур бер балыҡ булған да,
Янына барған Һомайҙы
Шул урында **ҡарпыған.**
47.**Ҡайыҡ** яһап бар кеше
Һыуға батып үлмәгән.
48.**Һыу алмаçлыҡ юл** булып,
Ҙур тау ҡалҡа барған ти.
49.Ҡоҙғон эсмәй, ер йотмай,
**Күпсеп ята** ҡаныгыҙ.
**50.Бер талай көн уҙғас та**
Ҡоҙғоно килде шау менән.
51.Билем биштән быуҙым мин,
**Һинең юлды ҡыуҙым мин.**
52.Унан **этлек** күрһәгеҙ…
53.Дейеүгә юл ҡуйманым,
**Тубарлата башланым**.
54.Иҙел тигән улың мин,
Һиңә **төбәп килдем** мин.
55**.Утка өтмәксе** булған,
Башына етмәксе булған.
56.Һыуһыҙ ҡалып дейеүҙәр,
**Кәре китеп** хур булған.
57.**Яуызлығың ат иттең,**
**Атам йөҙөн ят иттең,**
**Әсәм һөтөн ыу иттең…**

58.**Яҡшылыктан күҙ йомдоң,**

Ҡан ҡойорға **ынтылдың.**
59.**Кеше һине ишкә алмаç,**
**Кешегә асыу тарҡыған**
60.Һыбай йөргән арыçланым
Ике **һөрөнөп абынды…**
61.Йәншишмәнең **бар һыуын**
**Һоçоп алып киләйек.**
62.Йәнем бирмәй **серәштем…**
63.Бер йотомдай ҡаным бар,
**Елберәгән** тәнем бар
Һөйәк-һаяҡ ҡыйралған
Тик тарҡалмаç **һыным** бар.
64.Үлем саҡырып ҡараным,
**Буй бирергә** уйланым.
65.Донъяны матур төҙөгән,
**Бағты мәңге биҙәгән.**
66.Ил бәхете ине, тип,
Бары **һыктап илаған.**
67.Күлдең һыуын эсмәгеҙ,
**Хараплыҡҡа** төшмәгеҙ.
68.**Еçерҙәрҙең** алдында
Күҙенә керпек булығыҙ.
69.Менәренә ат булып
**Йылҡы ла түлләп киткән ти.**
70.Уны тар-мар итһәң дә,
Күленән **ил мандымаç**.
71.Бейек тауға менгәндә
**Ирәмәлләп торған ти.**
72.Бөтөрәлер **һыу көçәгән** уйҙарҙы.
73.**Яҡшылыҡ булһын атығыҙ,**
**Кеше булһын затығыҙ.**

**II. “Алпамыша”** спорт уйындарын көн һайын төрләндереп, төрлө уйындар өйрәтергә кәрәк. Уйындар 30 минут дауам итә. Уҡ атыш. Ҡул көрәше. Билбаулы көрәш (белгес булған осраҡта). Табан терәшеп бер-береңде тартып торғоҙоу. Арҡан тартышыу. Бәләкәйҙәр өсөн Соҡор туп. Сәкән һуғыу. Ат сабышы (Тал сыбыҡҡа атландырып ярышыу).

**III.Уйындар.**

1.**Алдан уҡ бер шиғыр яҙып эленә**. Уны уҡыусылар ятлап алырға тейеш. Шиғырҙың һәр һүҙе айырым яҙылып, ырыуҙарҙағы балаларға таратып бирелә. Шиғырҙың юл башындағы һүҙҙәр ҙур хәреф менән яҙыла. Команда булғас та балалар шиғыр юлына ҡарап үҙ урындарына баҫырға тейеш.

**Мәҡәлдәр менән дә ошондай уҡ уйын-ярыш үткәрергә**. Ул саҡта инде һәр ырыуға кәмендә етешәр мәҡәл яҙырға кәрәк. Һәр хәлдә һәр балаға бер һүҙҙән таратырлыҡ булһын.

2**. Алфавит уйыны**. Ырыу ике төркөмгә бүленә. Команда булғас та исемдәренең баш хәрефтәренә ҡарап алфавит төҙөйҙәр. Ҡайһы команда алда – шул еңеүсе.

3.**Ишара менән аңлашыу.**Бер малай менән бер ҡыҙ йәки ике малай, ике ҡыҙ саҡырыла. Кемдәр саҡырылыуына ҡарап тема бирелә һәм шуны ым-ишара менән күрһәтеү эше йөкмәтелә.

4.**Туп уйыны.** Тупты ырғытыусы берәй баланың исемен әйтә лә һауаға сөйә, ул бала килеп етеп тотоп алырға тейеш. Тота алмаһа, “яза” ала.

5. **Турғай.** Алып барыусы һыңар аяғында һикерә. Башҡа балалар ҙа һыңар аяҡлап һикерергә тейш. Ул ике аяҡлап һикерһә, башҡалар ҙа ҡабатларға тейеш.Кем яңылыша – уға “яза” бирелә.

6.**Математика.** Төркөмдөң йәшенә ҡарап миҫалдар ҡабатлау ғәмәлдәре эшләү. Иң бәләкәй төркөмгә, мәҫәлән, ҡабатлау

таблицаһынан уйындар. Бер балаға – 7, икенсеһенә - 8, өсөнсөһөнә – 56 һандарын биреп сыға ла, алып барыусы ике һанды сығара һәм, яуабы кем? - Сығып баç, - ти. Яуаптар үҙ һандарын йәшереп тота, сыҡҡас ҡына күрһәтә.

7. **Ҡапҡа уйыны.** Икешәр бала, бер-береһенән ике аҙымдай ара ҡалдырып, етәкләшеп, ҡулдарын күтәреп, ҡапҡа яһап тора. Башҡа балалар сылбыр булып теҙелә. Көй уйнай. Көй ыңғайына балалар бейей-бейей ҡапҡа аша сыға. Көй туҡтаған мәлдә ҡапҡа ике яҡлап дүрт баланы уртала ҡалдырырға тейеш. Дүртәүҙе ҡалдыра алмаһалар, үҙҙәренә "яза", ҡалдырһалар, улар ҡапҡа булып баҫа.

8. **Беҙҙең ишек алдында.**
Балаларға бүлеп бирелә:
Әтәс ҡойма башында,
Алтын тараҡ башында.
Йоҡонан тора иртүк,

Ҡысҡыра:
Күмәкләшеп, ҡанаттарын ҡағып-ҡағып: Кикерикүк!" (Бер нисә тапҡыр)
Ҡаҙҙар төшкән йылғаға,
Йәшел үләнле ярға.
Күңелле һөйләшәләр:
Ҡаҙ булып күрһәтәләр, кем нисек теләй – шулай:
Ҡа-ға-ға-ҡа-ға-ға.

Бесәй сумған байлыҡҡа –
Төшкән тәмле ҡаймаҡҡа.
Аҙағы нисек бөтөр?..
Йырлаһа ла: "Мыр ҙа мыр!"

Бутҡа бешергән ҡарға,
Ҡунаҡ саҡырған, ҡара.
Ишетелә тауыштар:
Ҡар-ҡар-ҡар, ҡар-ҡар-ҡар.

Әсәһе менән бергә

Себешкәйҙәр йүгерә.
- Зилә, беҙгә емдәр һип,
Сип-сип-сип, һип-һип-һип!..

Баҡса тулы кәбеҫтә,,
Түтәлдә йөрөй кәзә.
Сыбыҡ күрһәтә Зилә,
Ә кәзә: “Мә-кә-кә, мә-кә-кә!”

Йомортҡа һалған тауыҡ,
Яҡтырып киткән кетәк.
Шуға йөрөй ҡыуанып:
- Ҡыт, ҡытаҡ та, ҡыт-ҡытаҡ!”

Төнө буйы йоҡламай,
Йорт-ҡураларҙы һаҡлай.
Барығыҙ ҙа һап-һау,
Аҡтүш өрә: һау-һау.

**4. Һорау-шиғырҙар: кемдең кеме бар?**
Һыйырҙың – (быҙауы) бар,
Өйрәктең (бәпкәләре).
Аҡбайҙың (көсөктәре),
Турғайҙың – (ҡошсоҡтары).
Аттың (ҡолонсағы) бар,
Һарыҡтың (бәрәстәре),
Ә минең апайымдың
Игеҙәк (бәпестәре).

10.**Исемеңде һатып ал.** Ҡағыҙға исемдәр яҙыла ла кемгә етте шуға таратыла. Һәр кем үҙ исемен табырға һәм һатып алырға тейеш. Исем хаҡы – башҡорт телендә шиғыр.Исемен һатып алмаған кешенән бер мәрәй алына.

11.**Исемдәр йомғағы.** Кәмендә унарҙан төркөмдәргә бүленәләр. Төркөмдә беренсе бала исемен әйтә, икенсеһе уның исемен һәм үҙенекен әйтә. Шулай дауам итә. Ҡайһы төркөмдөкөләр яңылышмай, улар – еңеүсе.

12.**Аждаһа.** Балалар бер-береһенең биленән тотоп, теҙелешә лә аждаһа барлыҡҡа килә. Аждаһаның башы ҡойороғон эләктермәксе була. Балалар ҡулдарын ысҡындырмаҫҡа тейеш.

13. **Бурыс башҡарыу.**Ботаҡтағы япраҡтарға төрлө эштәр яҙылған. Балалар япраҡтарҙы таратып ала ла барыһы бер юлы уны үтәй башлай.

14. **Дауамлы йыр.** Береһе туҡтай, икенсеһе дауам итә. Командалар ярышы.

15.**Дауамлы бейеү**.Командалар ярышы.

16.**Светофор.**Юл ҡағиҙәләрен өйрәнеү.

17.**Уҡ атыу.**

**18.Теләктәр уйлап сығарыу**

Табынығыҙ йәмле булһын,
Ашығыҙ тәмле булһын!
Йөҙөгөҙгә нур бөркөлһөн,
Беләктәргә көс ҡунһын!
Уянығыҙ, тороғоҙ,
Йылмайығыҙ, көлөгөҙ!

Иртән йылмайып уянһаң,
Матур үтер көнөгөҙ.
Зарядкаға сығайыҡ,
Теҙеләйек, баҫайыҡ!
Киреләйек, һуҙылайыҡ,
Эйеләйек, бөгөләйек,
Һикерәйек, йүгерәйек,
Шулай йоҡо асайыҡ!

Ашаттығыҙ, туйҙырҙығыҙ,
Бигерәк тәмле ашығыҙ:
Күңелегеҙ якты һеҙҙең,
Нурлы һеҙҙең йөҙөгөҙ.
Рәхмәт һеҙгә, апайҙар!
Ҡулығыҙға бәрәкәт,
Йәнегеҙгә тыныслыҡ,
Һәр саҡ шулай һау-сәләмәт
Йәшәгеҙ һеҙ бик рәхәт!
Ашағыҙ һеҙ тын ғына
Күренһен тик ым ғына.

IV. **“Һыуһылыу менән Заятүләк”** (Һыу һибеш) уйыны. Был уйынды лагерҙарҙа “Нептун көнө” тип атайҙар. Беҙ иһә, башҡорт халҡының ошо исемдәге эпосына нигеҙләнеп, балаларға был матур мөхәббәт тарихы тураһында мәғлүмәт биреү маҡсатында уйынды әле тәкдим ителгән сценарий буйынса үткәрергә булдыҡ.

Заятүләк менән Һыуһылыу һайлап алына. Һыуһылыу итеп сәсе оҙон ҡыҙҙы алабыҙ.

Һыуһылыу һыу буйында сәсен тарап ултыра. Уны Заятүләк һағалай. Яйын тура килтереп, ҡыҙ күрмәгәндә генә толомоноң осонан эләктереп ала. Ҡыҙ инде генә һыуға сумам тиһә, сәсе тартыла. Ҡараһа, бер егет ултыра.

- Ебәр, Ер улы. Мин - Һыу ҡыҙы. Һыуһыҙ йәшәй алмайым.
- Нисә көн, нисә төн ошонда көттөм мин һине. Юҡ, ебәрмәйем.
- Улай булғас, минең менән бар. Мин Һыу батшалығында йәшәйем.
- Юҡ, Һылыу. Мин – Ер улы. Мин Балҡантауһыҙ йәшәй алмайым.
- Улай булғас, мин киттем, Заятүләк.

Заятүләк Һыуһылыуҙың толомон ысҡындырмай. Һыуһылыу һаман Һыуға һөйрәй. Шул саҡ Һыу аҫтынан ҡыҙҙар килеп сығып,

Һыуһылыуға ярҙамға ташлана. Ерҙән егеттәр Заятүләкте ҡотҡармаҡсы була. Һыу һибеш башлана. Тейешле ваҡыт үткәс,Заятүләк Һыуһылыуҙы ергә алып сыға. Уларҙың иңдәренә елән һалалар.

*Заятүләк:*

Уң яғымдан терәргә
Һыуһылыуым бар минең.
Һул яғымдан терәргә
Балҡантауым бар минең.
Бөгөндән башлап ҡыҙҙар килен булып егет иленә төшәсәк. Киттек, Һыуһылыу, ти.

## V. ЙӘЙЛӘҮ ЙЫРЫ

*Был матур йыр авторҙарҙың ҡомартҡыһы булып ҡалды. 1998 йылда йәмле Нөгөш буйында беренсе тапҡыр башҡорт лагеры эш башланы. Йәйләүҙә тәрбиәсе булып шағирә Рәсимә Ураҡсина һәм композитор Дамир Әҙелбаев эшләне. Йәйләү гимны итеп Д. Әҙелбаевтың "Башҡортостан" йырын һайланыҡ. Шул уҡ ваҡытта "Йәйләү"ҙең эске йөкмәткеһен сағылдырған, һәр саҡ йырлап йөрөрлөк йыр ҙа кәрәклеге күренде. Рәсимә Ураҡсина менән Дамир Әҙелбаев ике көн эсендә ошо йырҙы ижад итте. Балалар шунда уҡ отоп алып йырлап та ебәрҙе.*

**"Йәйләү" йыры.**

Йәйләүебеҙ бик йәмле

Тарала шат йырыбыҙ.

Тирмә ҡорҙоҡ яланда

Шәп беҙҙең ырыуыбыҙ.

*Ҡушымта.*

Тамъян, Бөрйән, Үҫәргән,

Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табындар.

Юрматылар  килделәр,

Гөрләп тора яландар.

*(Йәйләүҙәге бүленешкә ҡарап ырыу исемен алмаштырып та ебәрәбеҙ. Әйтәйек, "Ҡыпсаҡ, Меңдәр, Табындар" йәки "Әйеләр ҙә килделәр")*

Ете ырыу – ете таж,
Тупланырбыҙ туп булып.
Берҙәмлек, татыулыҡта
Башҡорттарға ҡот булып.
*Ҡушымта.*

Йәйләү йәйләү йәйләргә
Йәмдәр бирә йәйҙәргә.
Моңға тулып ҡайтабыҙ
Атай һәм әсәйҙәргә.
Ял итәбеҙ, уйнайбыҙ,
Иң бәхетле бала беҙ.
Ерҙән ҡеүәт йыябыҙ,
Ҡояштан көс алабыҙ.
*Ҡушымта.*

Ерле, йырлы Ете ырыу
Йәйләүҙәрҙән юҡ арыу.
Йәйләү күңелгә дарыу,
Ерле, йырлы Ете ырыу.
Тамъян, Бөрйән, Үҫәргән,
Ҡыпсаҡ, Ҡатай, Табындар.
Юрматылар  килделәр,
Гөрләп тора яландар.

***Иçкәрмә.****“Йәйләү”ҙә эшләргә теләүсе тәрбиәселәр һәм әйҙәүселәр ҡулында мотлаҡ “Тормош һабаҡтары”. “Башҡорт мәҙәниәте” дәреслектәре һәм “Башҡорт балалар уйындары”, “Башҡорт йырҙары”, “Легендалар һәм риүәйәттәр” китаптары булырға тейеш.*

## *БАШҠОРТОСТАН*

***(****Дамир Әҙелбаев һүҙҙәре һәм көйө)*

1. Ҡояш сыға тау артынан,
Уяна йоҡонан
Башҡортостан иле.
Ергә ҡояш нурын сәсә
Һәм беҙгә өндәшә,
Аңлашыла теле.

**Ҡушымта**
Азат һинең илең,
Моңло һинең телең,
Мәңге йәшә тимен был ерҙә.
Ҡурайың һынмаһын,
Йырҙарың тынмаһын,
Телең онотолмаһын ғүмергә.

2. Көрәш әле туҡтамаған,
ләкин юғалмаған
Еңеүгә ышаныс.
Йөрәк тағы нығыраҡ тибә,
Уйҙар алға илтә,
Күңелдә - ҡыуаныс.

**Ҡушымта шул уҡ**

3. Дуçлыҡ һәр саҡ беҙҙең юлдаш,
Бар халыҡтар моңдаш
Башҡортостандағы.
Әйҙә мәңге шулай булһын,
Үçһен һәм нығыһын
Халыҡтар дуçлығы.

**Ҡушымта**

Азат һинең илең,
Моңло һинең телең,
Мәңге йәшә тимен был ерҙә.
Ҡурайың һынмаһын,
Йырҙарың тынмаһын,
Телең онотолмаһын ғүмергә.

*ЮҒАЛҒАН МӘҠӘЛДӘР УЙЫНЫ.*

*Яҙып эленгән мәҡәлдәр ике өлөшкә бүленеп, ике ҡағыҙ киҫәгенә яҙыла һәм балаларға таратыла. Мәҡәлдең беренсе өлөшө ҙур хәрефтән башлап яҙыла ла тыныш билдәһе беренсе өлөштә лә икенсе өлөштә лә ҡуйыла. Уйын барышында кемдәр тиҙерәк табыла – шул еңеүсе һанала. Табышҡандар теҙелешеп тора бара. Барыһы биш төркөм иҫәпләнә. Беренсе төркөмгә – биш мәрәй, икенсеһенә – дүрт, өсөнсөһөнә – өс, дүртенсеһенә – ике. Ҡатнашҡандары, әммә табыша алмағандарына – берәр мәрәй. Табышыу өсөн минутлап ваҡыт бүленә.*

*Мәҡәлдәр "табышып", теҙелеп баҫҡандан һуң, мәҡәлде ҡысҡырып уҡыйҙар һәм аңлатма бирәләр. Аңлатма биреү мәрәй бүлгәндә, иҫәпкә алына.*

Ир-егеттең үлгәне – илен дошман алғаны.

Ошолай бүленә: беренсе өлөш **Ир егеттең үлгәне –**

Икенсе өлөш: **- илен дошман алғаны.**

<u>Һәр ырыу балаһының ятлап алыу һәм мәғәнәһен аңлау кимәленән сығып мәҡәлдәрҙе һайлап алырға</u>.

Егет булһа, ебеп тормаҫ; ебеп торһа, егет булмаҫ.
Иптәшеңә ҡул һелтәмә, кәрәк булып бер көндө.
Айырылмаҫ дуҫыңа ҡайырылмаҫ һүҙ әйтмә.
Иптәшең менән һыйлаш, дуҫың менән серләш.
Туған – ҡәрҙәш, дуҫ – фекерҙәш.
Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә йән бирер.
Дуҫ көлгәндә, һыналмай; бөлгәндә, һынала.

Ҡара төндә дуҫ булғанды ҡылыс та айыра алмаҫ. (Ҡара төн – иң ауыр ваҡытта)
Атайыңдың дошманы һиңә дуҫ булмаҫ.
Дуҫҡа баш булмайҙар, иш булалар.
Йөрәк боҙған – аш түгел, көнөң боҙған – дуҫ түгел.
Күңел берлеге булғанда, кейем төрлөлөгө һиҙелмәй.
Аҙ ҡайғыны аш баҫа, күп ҡайғыны дуҫ баҫа.
Дуҫлыҡ ашта беленмәй эштә беленә.
Матурҙар матур күренмәй, һөйгән матур күренә.
Кеше һине аңлаһын өсөн, үҙең кешене аңлап өйрән.
Атайыңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул.
Күҙе һуҡырҙан ҡурҡма, күңеле һуҡырҙан ҡурҡ.
Гөлөң сәскә атмаһа, ҡояшҡа үпкәләмә.
Яҡшы ғәҙәт әҙәм итер, яман ғәҙәт әрәм итер.
Яҡшы һүҙ – күңел күрке.
Осҡанда, ҡарлуғас уҙыр; һайрағанда, һандуғас уҙыр.
Башҡа бәлә – телдән.
Ауырыуға дауа бар, дәртһеҙгә дауа юҡ.
Билдәһеҙ эштә тәүәккәллек ҡотҡара.
Ир ғәйрәте тауҙы ҡом итә.
Булыр илдең балаһы бер-беренә “батыр” ти; бөлөр илдең балаһы бер-беренә “бахыр” ти.
Ике туған татыу булһа, юҡтан бар яһар; ике туған аҙар булһа, барҙан яҙҙырыр.
Атты сыбыртҡы менән ҡыумайҙар, һоло менән ҡыуалар.
Ил ағаһы булыр ирҙең изге кәңәш булыр юлдашы.
Һөйҙәргән дә тел, көйҙәргән дә тел.
Аш һалҡыны һыуытмаҫ, һүҙ һалҡыны һыуытыр.
Яҡшы әҙәм – илдең ырыҫы, яҡшы һүҙ – йәндең тынысы.
Тар табында сәй эскәнсе, киң табында һыу эс.
Ялҡауға эш өйрәтһәң, ул һиңә аҡыл өйрәтеп маташыр.
Эшләгәнең минең өсөн булһа, өйрәнгәнең үҙең өсөн.
Тура әйткән туғанына ла ярамаған.
Тел ҡылыс: тейешһеҙ урында – тый, тейешле урында – ҡый.
Үҙ илеңдә хужа булмаһаң, кеше илендә ҡол булырһың.
Дуҫы күпте яу алмай.
Исемең есемеңә тап килһен.
Кейем ең килбәтле булһа, үҙең һиммәтле булырһың.
Ҡурайсының тыны иркен, йыраусының күңеле бай.

Йәй сүпләп йыйһаң, ҡыш услап ашарһың.
Аҫыл егет үҙе үлһә лә даны ҡала тыуған илендә.
Алтындың – заты, яҡшының аты (исеме) юғалмаҫ.
Һыу ҡәҙере шишмә юғалғас беленә.
Бер ағас ҡырҡһаң, икене ултырт.

***“Алтын тирмә” уйыны өсөн  һорауҙар:***

Бер мөсәлдә нисә йыл?

Һанап сыҡ. Ун ике йыл. Сысҡан, һыйыр, юлбарыҫ,куян, аждаһа, йылан, йылҡы, ҡуй, маймыл, тауыҡ, эт, сусҡа йылдары. 2015 йыл – ҡуй йылы. Ошонан сығып башҡаларын һанап сығарығыҙ. Йыл тәртибе тап ошолай килә.

Боронғоса ай исемдәре: март – буранай, апрель – алағарай, май – һабанай, июнь – һатай, июль - майяй, август – урағай, сентябрь – һарысай, октябрь – ҡарасай, ноябрь – ҡырпағай, декабрь – аҡъюлай, ғинуар – һыуығай, февраль – шаҡай.

Донъя кимәленә билдәле батырҙарыбыҙҙан кемдәрҙе беләһегеҙ?

Ниндәй башҡорт киноларын беләһең?

“Тормош һабаҡтары” дәреслегенән ошондай һорауҙар алырға кәрәк.

***<u>Һорауҙар:</u>***

Башҡортса аҙна көндәре.

Дүшәмбе, Шишәмбе, Шаршамбы, Кесаҙна, Йома, Шәмбе, Йәкшәмбе.

Башҡорттарҙың милли аҙыҡтары.

Ҡымыҙ ниндәй һөттән яһала? (Ғәҙәттә ат һөтөнән тип яңылыш әйтәләр)

Халҡыбыҙҙың иң мәшһүр эпосы ниндәй?

Тағы ниндәй эпостар беләһең? (Аҡбуҙат. Ҡуңыр буға. Заятүләк менән Һыуһылыу. Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу.)

Ниндәй шифалы үҫемлектәр беләһең? Айыу көпшәһе, аҡ әрем, андыҙ, артыш, арыш, ат ҡуҙғалағы, балтырған, башлы һуған, ер еләге, шалфый, мәтрүшкә әрем, эт муйылы, юл япрағы, ҡайын һәм башҡалар.

Иң күренекле ҡурайсылар? Бөтөн донъяға данлыҡлы ҡумыҙсыларыбыҙ.

Башҡорттар донъя кимәленә ниндәй сәнғәт өлгөһө менән билдәле?

Башҡорт бейеүе тыпырлағы ниндәй тауышҡа оҡшаған?

Шүлгән мәмерйәһе ҡайһы районда?

*“Тормош һабактары” дәреслеге материалдарынан ошондай һорауҙар алырға кәрәк.*